# Ер яҙмышы – беҙҙең ҡулда

Хәйретдинова Гүзәлиә,
9 класс, Башҡортостан Республикаһы Архангел районы муниципаль районы
Тирәкле урта д0й0м белем бире1 м2кт2бе

Уҡытыусыһы: Баһауетдинова Альмира Рафаил ҡыҙы,
Башҡортостан Республикаһы Архангел районы муниципаль районы
Тирәкле урта д0й0м белем бире1 м2кт2бе

2017 йыл

# Судьба земли – в наших руках

Хайретдинова Гузалия,
9 класс, Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение
средняя общеобразовательная школа д.Тереклы
муниципального района Архангельский район Республики Башкортостан

Багаутдинова Альмира Рафаиловна,
Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение
средняя общеобразовательная школа д.Тереклы
муниципального района Архангельский район Республики Башкортостан

2017 год

Һыҙылып ҡына таң ата... Бар донъя уяна. Ошо миҙгелдә ҡояш бөтә тирә - яҡты наҙлап ҡына иркәләй. Япраҡтарҙағы, үлән өҫтөндәге ысыҡ тамсылары ынйы булып күҙ яуын үҙенә йәлеп итә. Сәскәләр еҫе аңҡый. Рәхәтләнеп күкрәгеңде киңәйтеп тын алаһың, ниндәй рәхәт! Ошондай гүзәллекте, сафлыҡты бөтә кеше күрә белә микән!? Был миҙгелде туҡтатып була микән!?

Тссс...Был нимә? Ниндәй тылсымлы тауыш ишетелә? Сут-сут, сут-сут...Һандуғас... Ҡайындарға баҫып, сәңгелдәктәге бала һымаҡ, талғын ғына тирбәлә торған һандуғастар, ишетелер-ишетелмәҫ кенә шылтыраған һыу тауыштарына ҡушылып һайрайҙар, һоҡланып туймаҫлыҡ матур тәбиғәт музыкаһы төҙөйҙәр. Ҡушылып йырлап ебәрәһе ине, ҡурҡам, ошо матурлыҡты боҙорға ҡурҡам. Саф һауа, ҡояш нурҙары, тынлыҡ... Йылы ел әкрен генә сәстәремде тарай. Эх, бер рәхәтләнеп йүгереп барып ошо матурлыҡты ҡосоп алаһы ине, рәхәтләнеп бер йырлайһы ине…

Ысынлап та, тыуған еремде, уның тәбиғәтен бер ниндәй һүҙҙәр менән асып бөтөрөп булмай. Был матурлыҡты күреп тә бөтөрөрлөк түгел.

Кешегә иң ғәзизе – тыуған әсә, иң ҡәҙерлеһе – тыуған тупраҡ, иң татлыһы – тәү эскән һыуың, иң йылыһы – һине йылытҡан өй усағы, иң күркәме – тыуған өйөң, иң йәмлеһе – туған тәбиғәтең. Мин быны бөтә ғорурлығым менән әйтәм.

Тыуған яғым иҫ киткес матур, бай тәбиғәтле. Был матурлыҡ балаларҙы, йәштәрҙе, хатта өлкәндәрҙе лә үҙенә әйҙәп тора. Бигерәк тә Төлкөлө тауының күркәмлеге күптәрҙе һоҡландыра. Төлкөлө тауы ауылдан төньяҡтан ҙур һәм оҙон булып йәйрәп ята. Урта өлөшө ағасһыҙ, асыҡ, төньяҡҡа табан урман башлана. Урман йәнлекһеҙ булмай, тигәндәй, төлкөләр, ҡуяндар иркенләп йәшәй биргәндәр. Һуңға табан тауҙың ағастарын ботап, сәсеүлеккә әйләндергәндәр. Тауҙың өҫтө етемһерәп яланғас ҡалған, ә төлкө һәм ҡуяндар төньяҡҡа табан тыныс урын эҙләп, ҡалын урманды төйәк иткәндәр. Борон төлкөләр ауылға килеп, тауыҡ кәтәгенән тауыҡ урлап йөрөһәләр, хәҙер эҙҙәрен дә күрмәҫһең.

Йәштәр байрамдарҙы тауҙа үткәреүсән, шул байрамдарҙың береһе булып Ҡыҙҙар тауында үткәрелгән ҡыҙҙар байрамы торған. Күңел асырға ҡыҙҙар менән еңгәләр ҙә барған.Улар ҡыҙҙарҙы ҡурсалағандар йәки, икенсе төрлө әйткәндә, егеттәр күҙенән һаҡлағандар. Ҡыҙҙар үҙҙәре менән тәмле ризыҡтар алғандар.Улар төрлө уйындар уйнағандар, ҡумыҙ сиртеп бейегән, йырлаған. Иң ҡыҙыҡлы уйындары йоморҡа тәгәрәтеү булған. Уны һынамыштар әйтеп тәгәрәткәндәр. Мәҫәлән: „Әгәр йоморҡам йыраҡҡа тәгәрәһә, мин йыраҡҡа кейәүгә китәм” һ.б. Ә инде туй күлдәге кейгән ҡыҙ менән егет парлашып,тау өҫтөнә күтәрелгәндә, ҡанат елпеп осҡанын күҙ алдына килтереп, һоҡланып ҡарап тораһың.Улар күтәрелеп, гармун, ҡурай һыҙҙырып, дер һелкетеп бейеп тә ебәрһәләр, матурлыҡҡа икеләтә йәм өҫтәлә.Туғайында үҫкән муйылдар ап - аҡ сәскәгә күмелһә, тирә - яҡты аңҡытҡан хуш еҫтәре танауҙы ҡытыҡлай һәм йәнгә рәхәтлек бирә.

Көндәр йылыныуға тау битләүҙәре ап -аҡ еләк сәскәһенә күмелә.Еләк өлгөрөү мәле үҙе бер сихри донъя кеүек тойола. Был ваҡытта иртәнән кискә тиклем еләк йыйыусыларҙың шат тауыштары яңғырап тора. Июль айында тау буйҙары тынып ҡала, сөнки халыҡ урманға ҡурай еләге еләге йыйырға йөрөй. Урман үҙ байлығы менән ихлас бүлешә.

Август - сентябрь айы еттеме, халыҡ Ҡабанлы тауына йүнәлә. Унда тәбиғәттең бер байлығы - сәтләүек өлгөрә. Был тау ҙа үҙенә күрә йәмле. Ағастан - ағасҡа һикереп уйнаған тейендәре балаларҙың күңелдәрен арбай. Улар сәтләүеккә ҡарағанда, тейен күҙәтеү менән мауығып, ниңә килгәндәрен дә оноталар. Йыш ҡына сәтләүекһеҙ ҡайтыу осраҡтары ла булғылай. Сентябрь - октябрь айҙары баландар өлгөргән мәл. Тоҡ - тоҡ баландар йыйып, ҡыш көнө балан бәлеше бешереү үҙе генә ни тора!

Ауылымдың иң моғжизәле хазинаһы - ул Баҫыу йылғаһы. Таҙа, балыҡҡа бай Баҫыу йылғаһы, кешеләрҙе һыуға туйындырайым, халыҡҡа йәшәү дәрте өҫтәйем тигәндәй, ашығып, бормаланып - бормаланып ауылым эргәһенән аға. Һыуы ла тәрән түгел, төбөндә таштары күренеп ята. Йылға

буйҙарында үҫкән зифа талдар, ғорур тирәктәр йылғаға рәхмәттәрен уҡып, баш эйеп, ҡулдарын болғап, уны оҙатып ҡалалар. Баҫыу йылғаһы тауҙан, ҡалын урмандар араһынан башланған. Түбәнгә елгәндә тауҙар араһынан ағып сыҡҡан бик күп шишмәләр һәм бәләкәй йылғалар ҡушыла барған. Шунлыҡтан тигеҙлеккә төшкәнсе тулы һыулы, ҡаты ағымлы тәрән йылғаға әүерелгән. Һуңғы йылдарҙа Баҫыу йылғаһы бик ныҡ һайыҡты, ярҙары йыуылды, ундағы балыҡтар ҙа кәмене. Ярҙарында үҫкән мөһәбәт тирәктәр ауҙы.

Эйе, Башҡортостаныбыҙ, тыуған яғыбыҙ тәбиғәте бик бай, ләкин уның ҡалын урмандары, мул һыулы йылғалары, зәңгәр күлдәре яҡлауға, һаҡлауға мохтаж. Һуңғы йылдарҙа тәбиғәткә ҡарата битарафлыҡ күҙәтелә. Онотмайыҡ: тәбиғәт - әсәбеҙ беҙҙе туйындырыусы ла, йәшәргә көс-дәрт биреүсе лә! Тормош өсөн кәрәк әйберҙәрҙе беҙ тәбиғәттән алабыҙ: аҙығын да, кейемен дә, йәшәр өсөн торлағын да. Кеше - тәбиғәт балаһы. Беҙ тәбиғәт менән айырылғыһыҙ. Тирә-яҡ мөхиттең саҡ ҡына үҙгәреүе лә беҙҙең йәшәйешебеҙгә, һаулығыбыҙға ҙур тәьҫир яһай. Шуның өсөн дә тәбиғәтте ысынлап та яратҡан, киләсәк быуындар алдында яуаплылыҡ тойған һәр кеше тыуған еребеҙ күркен һаҡлау өсөн бөтә көсөн һалырға тейеш. Тәбиғәтте вәхшиҙәрсә таләфләүгә сик ҡуйыу – минең, һинең, уның изге бурысы. Ер – әсәбеҙ йәшле күҙҙәр менән ярҙам һорап беҙгә төбәлгән. Ер яҙмышы – беҙҙең ҡулда! Ошо хаҡта бер ҡасан да онотмайыҡ!

Таң әтәсе ҡысҡыра... Тирә-йүнде алтын нурҙарға төрөп ҡояш сыға.... Ҡоштар һайрай... Ара-тирә көтөүгә сығыусы мал-тыуар мөңрәгәне ишетелә... Сылтыр-сылтыр шишмә аға... Яландағы аллы-гөллө сәскәләрҙән нескә билле бал ҡорттары бал йыя...